Муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы

Күгәрсен урта мәктәбе

«Ҡаралды» «Килешелде» “Раҫланды”

Методик берләшмә етәксеһе директор урынбаҫары Мәктәп директоры

_______/Сусанина Г.Ф. / _______ /Хәйбуллина Н.М./ _______ / Абдуллина Э.С./

Беркетмә №1«_»________2023йыл«30» август 2023 йыл Беркетмә №____«___»_______2023 йыл

МБОУ СОШ с. Кугарчи

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренә**
**эш программаһы**
**1-4 кластар өсөн**

**2023 йыл**

**Аңлатма яҙыу**
1-4 кластар өсөн туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәтенән эш программаһы. Был эш программаһында Федераль һәм Республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла. Башҡорт теленән эш программаһы уҡытыу рус телендә алып барылған Күгәрсен муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының1, 2,3,4 кластары өсөн түбәндәге документттар нигеҙендә төҙөлдө:
1. «Рәсәй Федерацияһының Мәғариф тураһында» законы 29.12.2012 №273-ФЗ
2.«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы;
3. «БашҡортостанРеспубликаһыныңМәғарифтураһында» законы 01.07.2013 №696
4.«Башҡортостан Республикаһыхалыҡтарытелдәретураһында» законы;
5. БашҡортостанРеспубликаһында Милли мәғарифтыүҫтереүконцепцияһы;
6. Санитар – эпидимиологикнормалар. 2.4.2821-10 (2010 йылдың 29 декабре ҡарары № 189)
7Күгәрсен муниципаль бюджет дөйөмбелембиреүучреждениеһыныңйыллыҡ календарь эшграфигы;
8. БашҡортостанМәғарифМинистрлығытарафынантәҡдимителгән программа«Күгәрсендөйөмбелембиреүмәктәбенең» муниципаль бюджет дөйөмбелембиреүучреждениеһының « Уҡыупланы»наярашлыраүештәтормошҡаашырыла.
9. Эш программаһы “Уҡытыу рус телендәалыпбарылғандөйөмбелембиреүойошмаларының 1-4-се кластарыөсөн “Башҡорт теле”(дәүләт тел булараҡ) предметы буйынсабелембиреүөлгөпрограммалары.-Өфө: Китап,2017.-28 бит.,” нигеҙендәтөҙөлдө.
10. Эш программаларыныңкағиҙәтәртибенәҙерләүһәмраҫлау.

11.Программа1 - 4 кластар өсөн Ф.Ф. Мортазина һәм З.Ғ.Нафиҡова төҙөгән программага нигеҙләнеп төҙөлдө.

Уҡыуҡулланмаһы:
1)З.Ғ.Нафикова,Ф.Ф.Мортазина Уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларында туған (башҡорт) телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү өсөн укыу ҡулланмаһы. 2018 китапӨфө.

Рус, татар мәктәптәренең башланғыс кластарында төп бурыс балаларҙы башҡортса һөйләшергә, укырға өйрәтеү булғанлыҡтан, лингвистик материал, әҙәби текстар нигеҙендә, тел сараларын әҙәби текста күҙәтеү, табыу, дөрөҫ әйтеү һәм яҙыу, әңгәмә һәм ижади эштәр ваҡытында дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү йүнәлешендәге эштәр аша башҡарыла. Был күренеш әҙәбиәт һәм тел материалының тематик бәйләнешен дә, мәғәнәүи бәйләнешен дә тәьмин итә, тәрбиәүи сараларҙы үткәреүгә киң юл аса. Рус телле Һәм татар телле мәктәптәрҙә эшләүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте укытыусылары сит телдәрҙә укытыу алымдарын, уның ҡаҙаныштарын ижади файҙаланырға тейеш. Тел һәм әҙәбиәт дәрестәрен бер-береһе менән бәйләп алып барыу яңы һүҙҙәрҙе, терминдарҙы һүҙлеккә яҙып барыу, һүҙлекте һәр дәрестә тулыландыра барыу уҡыусыларҙы һүҙ байлығын арттырыуҙа, уларҙың яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 1-4 кластар өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.
**Эш программаһы** 68 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт).
**Уҡытыусының тел буйынсаукыу- укытыу методик комплекты :**
Нафикова З.Ғ, Мортазина Ф.Ф.Урыҫмәктәптәрендәбашҡорттеленукытыуҙыойоштороубуйынса методик кәңәштәр; Өфө: Китап, 2008.
**Уҡыусыларөсөн тел буйынсаукыу- укытыу методик комплекты:** Нафикова З.Ғ, Мортазина Ф.Ф.Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендәалыпбарылғанмәктәптәрҙең1-4 класс

уҡыусыларыөсөндәреслек. – Өфө :Китап, 2010, Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендәалыпбарылғанмәктәптәрҙең 4- се класс уҡыусыларыөсөндәреслек. – Өфө: Китап, 2006.

**Программа үҙенсәлектәренеңхарактеристикаһы:** Эш программаһыБашҡортостанРеспубликаһыМәғарифминистрлығытарафынанраҫланған «Башҡорттеленән программа» (Уҡытыу рус телендәалыпбарылғанмәктәптәрҙең I-IX кластарыөсөн) нигеҙендәтөҙөлдө. ТөҙөүселәреТоломбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.- Ижевск: «Книгоград», 2008.

Был эшпрограммаһындаФедеральһәм Республика закондарыталаптарытормошҡаашырыла: «РәсәйФедерацияһыхалыҡтарытелдәретураһында» законы, РәсәйФедерацияһының «Мәғарифтураһында» законы, «БашҡортостанРеспубликаһыхалыҡтарытелдәретураһында» законы, БашҡортостанРеспубликаһының «Мәғарифтураһында» законы. Был программалабашланғыскластарҙабашҡорт теле фәнебуйынсауҡытыутематикаһы, уныңйөкмәткеһеһәмуҡыусыҙләштерергәтейешбулғануниверсальуҡыуэштөрҙәресистемаһы, метапредмет, шәхси, предмет һөҙөмтәләре бар.

Яңыстандарттарбуйынсауҡыусыларҙа лингвистик (тел), аралашыу (коммуникатив), этнокультура өлкәһенәкараған (культурологик) компетентлыҡбулдырыуталапителә.

Лингвистик компетентлыҡ (уҡыусыларҙыңбашҡорттеленәнмәғлүмәтлелеге) өндәрһәмхәрефтәрҙе, һүҙьяһалышын, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе, һүҙтөркөмдәрен, һөйләмкиҫәктәрен, лексикһәм грамматик берәмектәрҙе, лингвистик анализды һ. Б. Үҙәсенә ала.

Аралашыу (коммуникатив) компетентлығы — уҡығандыһәмбашҡаларһөйләгәндеаңлау, хәҙергеәҙәбибашҡорттелененнормаларынаэйәбулыу, һүҙбайлығын, телдең грамматик яғындөрөҫитепүҙләштереү, телдәнһәмяҙмаформалабәйләнешлетелмәркүнекмәләренбулдырыу һ. Б.

Этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ, йәғнителдемилли-мәҙәниюҫыҡтаүҙләштереү — улуҡыусыларҙыңтелгәөйрәнеүбарышындамиллиүҙенсәлектәрҙесағылдырғантекстарменән эшләүе, халҡыбыҙҙыңтормош- көнкүреш, йола, ғөрөф-ғәҙәтүҙенсәлектәрен, шанлы үткәнен, әҙәп-әхлаҡнормаларын, телмәрәҙәплелеген, һынлысәнғәтәҫәрҙәрен, мәҙәниәтен, халыҡауыҙ-тел ижадыүрнәктәренбелеүе, башҡортхалҡынынтелмәрәҙәплелегенүҙләштереүе, рухи ҡомартҡыларынихтирамитеүе һ. Б.

Башланғысмәктәптәбашҡорт теле дәрестәрендәбелембиреүҙеңтөп **бурыстарыһәммаҡсаттары:**

-башҡорт телендәһөйләшеү, фекерендееткерәбелеү, тел һәмтелмәркүнекмәләренүҙләштереүгәөлгәшеү;

-уҡыусыларҙыңтөрлөэшмәкәрлекте (уҡыуһәмбелемалыу, хеҙмәт, аралашыукүнекмәләрен) үҙләштереүҙәренәирешеү, универсальуҡыуэштөрҙәренәөйрәтеү;

-башҡортхалҡының рухи мираҫынөйрәнеүгәкыҙыҡһыныутәрбиәләү;

-дәреслек, өҫтәмә материал, һүҙлектәр, белешмәәҙәбиәтменәнэшитеүкүнекмәләренкамиллаштырыу;

-уҡыусыларҙың логик фекерләүһәләттәренүҫтереү.

Программаныңбурыстарынтормошҡаашырыуөсөнзамансаэшметодтарынһәмалымдарынҡулланырғакәрәк. Дәрестәуҡыусыларғатөплөбелемнигеҙ- ҙәре, ныҡлыкүнекмәләрбиреүменәнбергә, уларҙыңтаныпбелеүэшмәкәрлегенһәмфекерләүенүҫтереүсе, дөйөмүҫешентәьминитеүсеалымдарһәмсараларменәнфайҙаланыумотлаҡталапбулып тора. Уҡыусылар грамматик ҡағиҙәләрҙе практик эшнигеҙендәаңлап, әүҙемүҙләштерергә, алғанбелем- дәренаңлата, нигеҙләй, иҫбатлай, ҡулланабелергәтейеш. Уҡыусыларға проект

төҙөүметодынҡулланыуҙатәкдимителә.
Уңышҡаирешеүөсөн тел дәрестәреуҡыудәрестәременәнтығыҙбәйләпалыпбарыла.
Программа түбәндәге принциптарға таяныптөҙөлде:
1)һәрбаланыңшәхсиүҙенсәлектәрениҫәпкәалыу;
2)фәннилекһәмсистемалылыҡпринциптары;
3)уҡыусыларҙытөрлөяҡлапөҙлөкһөҙүҫтереү;
4)баланың психик һәм физик һаулығынһаҡлау.
Программаныңнигеҙендәкоммуникативлыҡпринцибыята.
**“ Башҡорт теле һәмәҙәбиәте” предметынадөйөм характеристика**

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә уҡыусыларҙан бәләкәй күләмле диктанттар, изложениелар, иншалар яҙҙырыу ҙа бик мөһим. Телмәр үҫтереүҙә бындай эштәрҙең файҙаһы бик күп. Бындай мәктәптәрҙә балаларға башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса теоретик мәғлүмәт биреү түгел, ә уҡыусыларҙың башҡорт телендә һөйләшә, уҡый, аңлай алыу, элементар яҙыу күнекмәләрен формалаштырыу һәм үҫтереү беренсе планда ҡала килә.

Программала тәҡдим ителгән теоретик материал ҡағиҙәләрҙе ятлау юлы менән түгел, ә уҡылған текстарҙан телдең орфоэпик, орфографик, грамматик нормаларын күҙәтеү, табыу, уларҙы аралашыу процессында ҡулланыу төп урында тора.

Программа кимәле: базис

Программаның йөкмәткеһе **3 йүнәлештә төҙөлгән:**

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;

- тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция);

- лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу **маҡсаттары:**

Билдәле булыуынса, белем биреүҙең маҡсаты йәмғиәт тарафынан ҡуйылған социаль заказ менән билдәләнә. Башҡортостан Республикаһының мәғариф системаһы алдында ҡуйылған төп бурыс - ижади фекерләүсе, инициативалы, ижтимағи тормошта әүҙем ҡатнашыусы, белемле һәм үҙ телендә иркен аралашыусы шәхестәр тәрбиәләү. Мәғариф системаһы алдында ҡуйылған стратегик маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙа башланғыс мәктәп беренсе баҫҡыс булып тора.

Урыҫ телле мәктәптәрҙә башҡорт балаларына туған телде уҡытыу маҡсаты күп яҡлы, һәм ул бер нисә **аспекттан тора**:

1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмғиәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.

2. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.

3. Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү.

4. Үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.

5. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, әҙәбиәте, сәнғәте, күренекле шәхестәре, йолалары, тыуған илдең тәбиғәте һ.б. менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

6. Бөтә һаналғандарға таянып, башҡорт телен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға патриотик һәм интернациональ тәрбиә биреү.

Күренеүенсә, тәҡдим ителгән программа башланғыс кластарҙа башҡорт телен өс йүнәлештә өйрәнеүҙе - башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу, башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү, бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәнеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ милли тәрбиә тураһында ла проблема күтәрелә.

**Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар**:

**1**. Танып белеү маҡсаты Уҡыусылар башҡорт халыҡ мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихи үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген белергә һәм аңларға, хөрмәт итергә, әҙәбиәт-сәнғәт вәкилдәренең ижади ҡаҙаныштары менән үҙенең рухи үҫешен байыта алыу мөмкинлеген файҙаланырға тейеш. Күп милләтле Башҡортостан Республикаһы, уның халҡы, башҡорт халҡының республикала төп, ерле халыҡ булыуы, башҡорт халыҡ ижады, билдәле шәхестәр, уларҙың эштәре, ижады менән таныштырыу башланғыс этапта танып белеү маҡсатының йөкмәткеһен тәшкил итә.

**2.** Үҫтереү маҡсаты Белем биреү маҡсаты методика фәнендә бик оҙаҡ йылдар буйы иң беренсе маҡсат итеп һаналды. Ләкин башҡа дидактик маҡсаттарҙы икенсе урында ҡарау белем биреү маҡсатының тейешле дәрәжәлә тормошҡа ашырылмауына килтерә. Шәхестең белемле булыуы уның фекерләү һәләте үҫешенән тора. Уҡытыу процесында үҫтереү, тәрбиә маҡсаттарын даими күҙаллап эшләү - сифатлы белем биреүҙең беренсе шарты (Л.С.Выготский). Был хәҡиҡәтте бигерәк тә башланғыс кластарҙа, балаларҙың белем алыу эшмәкәрлеге башланған осорҙа иҫтә тотоу мөһим.

Башланғыс этапта балаларҙың психик үҫешен түбәндәге йүнәлештәрҙә үҫтереүгә айырыуса иғтибар талап ителә:

Фекерләүҙе үҫтереү менән бәйле психик функциялар:

- логик фекерләү, сәбәп-һөҙөмтә;
- бәйләнештәрен табыу, индуктив, дедуктив фекерләү; Хәтерҙе үҫтереү (ихтыярлы, ихтыярһыҙ), иғтибарлылыҡты үҫтереү;
- аралаша белеү һәләтен үҫтереү (аралашыусанлыҡ, хислелек, эмпатия хистәре);
- ихтыяр көсө, маҡсатлылыҡ , әүҙемлек кеүек һәләттәрҙе үҫтереү.

**3.** Тәрбиәүи маҡсат.

Уҡыусыларҙың тейешле дәрәжәләге тәрбиәһенән башҡа уҡытыу процесын ойоштороу мөмкин түгел. Әлбиттә, уҡытыусының шәхси сифаттары, уҡыусы менән махсус ойошторолған мөғәләмәһе уҡытыу һәм тәрбиә процесында ҙур роль уйнай. Ләкин тәрбиә процесы беренсе сиратта уҡытыуҙың йөкмәткеһе һәм методтары менән бәйле. Тимәк, уҡытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда, материалдың тәрбиәүи мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу - программа һәм дәреслек авторҙары өсөн төп талап. Балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тура килгән, уларҙы ҡыҙыҡһындырған, әхләҡи проблемаларҙы үҙ эсенә алған йөкмәтке, беренсенән, уҡытыу процесында тәрбиәүи функция башҡарһа, икенсенән, туранан-тура

коммуникатив мотивация тыуҙырыу менән бәйле. Программаға балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған, әхләҡи проблемаға эйә булған бәләкәй күләмле әҙәби әҫәрҙәр һәм автор текстары индерелде.

**4.** Белем биреү маҡсаты

Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса лексик, грамматик күнекмәләре, филологик белемдәре сиктәрендә генә ҡалмайынса, телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә ҡулланырлыҡ кимәлдә булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеү бурысы үтәлә.

Һөйләү телмәрен үҫтереү:

1) картина буйынса һөйләү;
2) уҡыған тексты аңлы һөйләү;
3) шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;
4) йәштәштәре, ололар менән билдәле бер аралашыу сфераларында, ситуацияларҙа диалогик һәм монологик телмәр ойоштора белеү;
5) үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү.

Ишетеп аңлау (аудирование):

1) уҡытыусының дәрес, уйын ситуациялары менән бәйле һорауҙарын, күрһәтмәләрен аңлау;
2) әңгәмәләштәшенең таныш материалға нигеҙләнгән һөйләмен аңлау, уға мөнәсәбәтен белдереү;
3) тыңлағанда һөйләм, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләү, интонацияны айырыу;
4) әҙәби әҫәрҙәрҙең, текстарҙың йөкмәткеһен тыңлап аңлау;
5) аудиотаҫмалағы әкиәт, хикәйәне ишетеп аңлау.

Уҡыу телмәрен үҫтереү:

1) аңлап, дөрөҫ итеп уҡыу;
2) текстағы тыныш билдәләренә ҡарап, тейешле пауза һәм интонацияларҙы үтәү;
3) тексты үҙ аллы аңлы уҡыу;

4) унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу;

5) бәләкәй күләмле шиғырҙарҙы яттан һөйләү.

Яҙыу телмәрен үҫтереү:

1) айырым һөйләмдәрҙе, бәләкәй текстарҙы үҙгәрешһеҙ, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу;
2) матур яҙыу күнекмәләре;
3) байрам открыткаларыяҙыу;
4) һүҙлек диктанты яҙыу.

Программаның педагогик (методик) нигеҙҙәре: рус мәктәптәрендәбашҡорттеленуҡытыупрограммаһыдөйөм педагогик (методик) талаптарға, принциптарғанигеҙләнә. Улар түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала:

•өйрәнелгән материалды анализлау, сағыштырыу, предметтарҙы ниндәйҙер билдәләре буйынса классификациялау, дөйөмләштереү;
• предметтарҙың төп үҙенсәлектәрен айыра, аңлата белеү;
• предметҡа, күренешкә ҡарата үҙ фекереңдә әйтә һәм уны иҫбатлай белеү;
• уҡыусыларға әхләҡи һәм эстетик тәрбиә биреү;
• уҡытыуҙы коммуникатив йүнәлештә алып барыу;
•башҡорт теле системаһыныңбөтәкимәлдәрен (фонетик, лексик, морфологик, синтаксик,
• стилистик, пунктуацион) иҫәпкәалыуһәм практик файҙаланыу; телмәрэшмәкәрлегенбөтәтөрҙәреөҫтөндәэшләү;
• предмет-ара бәйләнеш, тарих, сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт, халыҡижадыһәмтрадицияларынанигеҙләнепөйрәнеү.

**Планлаштырылған белем биреү һөҙөмтәләре**

Башҡорт теле курсында предмет ярҙамында түбәндәге үҫеш юлдары тормошҡа ашырыла: предмет кимәлендә белемгә эйә булыу; уҡыу техникаһын үҫтерең; яҙма һәм һөйләү телмәренә эйә булыу; тел тураһында редме алыу һәм системалаштырыу; орфография һәм пунктуацияны өйрәнеү; башҡорт теленең тәрбиәүи потенциалын ҡулланыу; телде тойомлауҙы үҫтереү.

**Фонетика һәм графика**

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә була:

-өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе айырыу;

-өндәргә характеристика биреү: һуҙынҡылар (нәҙек һәм ҡалын, баҫымлы һәм баҫымһыҙ); тартынҡылар (яңғырау һәм һаңғырау, парлы һәм парһыҙ);

-башҡорт алфавитында хәрефтәрҙең урынлашыу тәртибен һәм уның әһәмиәтен үҙләштереү (һүҙҙәрҙе билдәле тәртипкә килтереү, алфавит ярҙамында кәрәкле мәғлүмәт эҙләү һ. Б.).

Башланғыс класты тамамлаусы укыусы бирелгән схема буйынса өн-хәреф анализын эшләргә өйрәнеү һәм уның дөрөҫ булыу-булмауын тикшереү мөмкинселегенә эйә булырға тейеш.

**Орфоэпия**

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек ала:

-башҡорт теленең нормаларын үтәү уҡыу һәм һөйләү, әңгәмәселәренең телмәрендә был нормаларҙың үтәлешен баһалау (программала бирелгән күләм кимәлендә);

-белмәгән осраҡта һүҙлектән йәки дәреслектән дөрөҫ әйтелеш нормаларын үҙ аллы табыу йәки уҡытыусыға мөрәжәғәт итеү.

**Һүҙ составы**

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә була:

-үҙгәрмәүсе һәм үҙгәреүсе һүҙҙәрҙе айырыу;

-тамырҙаш һүҙҙәрҙе һәм һүҙ формаларын таныу;

-һүҙҙәрҙә тамыр, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы табыу.

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшерә белергә, анализ яһарға өйрәнеү мөмкинселегенә эйә була.

**Лексика**

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә булырға тейеш:

-һүҙҙең мәғәнәһен дөрөҫләү, кәрәк булған һүҙҙе айырып алыу;

-һүҙҙең мәғәнәһен текст буйынса йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса дөрөҫләү

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек ала:

-бер төрлөлөктән азат булыу маҡсатында тейешле синонимдарҙы табыу һәм ҡулланыу;

-сағыштырыу һәм теүәл характеристика биреү өсөн антонимдар ҡулланыу;

-текстағы телмәрҙә ҡулланылған тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе таныу;

- ябай фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһен аңлау һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу;

-һүҙҙәрҙе урынлы йәки урынһыҙ ҡулланыуҙы баһалай белеү;

-аралашыу мәсьәләһен урынлы хәл итеү маҡсатында тәҡдим ителгән һүҙҙәрҙең тейешлеһен һайлал алыу.

**Уҡыу предметын өйрәнеүһөҙөмтәләре**

**Шәхси һөҙөмтәләр:**

Уҡыусы түбәндәге белемдәрҙе формалаштыра:

- уҡыу процесында белем алыуға ҡарата яуаплылыҡ булдырыу;
- мәктәп йыһаздарына, укыу әсбаптарына һаҡсыл ҡараш булдырыу;
- тыуған ил, ер, тел төшөнсәләре, тыуған илде яратыу, ерҙе, телде һаҡлау тураһында аң-белем биреү;

Уҡыусының түбәндәге белемдәрҙе формалаштырыу мөмкинселеге бар:

- һау-сәләмәт йәшәү рәүешен үҙләштереү;

- үҙ аллы эш итеү, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарау;
- атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу;

**Предмет һөҙөмтәләре:**

Уҡыусы түбәндәге белемдәрҙе формалаштыра:

- Башҡорт теленең бөтә өндәре һәм хәрефтәре, өн менән хәрефтең айырмаһын аңлау - Һүҙгә өн анализы, ижек анализы яһау, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар, тартынҡыларҙы айыра алыу, уларҙы дөрөҫ әйтеү, шулар нигеҙендә һүҙҙәр төҙөү.
- Кем? Нимә? Кемдәр? Нимәләр? һорауҙарын һәм уларға яуап булған һүҙҙәрҙе белеү һәм ҡулланыу. Ни эшләй? Ни эшләне? һорауҙарын ҡуллана белеү. Ниндәй? Ҡайһы? Ҡайҙа? һорауҙарының мәғәнә үҙенсәлектәрен аңлау, уларға яуап биреү. Минең, һинең, уның, беҙҙең, һеҙҙең, уларҙың алмаштарының мәғәнәләрен төшөнөү, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.
- Кешенең исеме, фамилияһы, ҡала, район, ауыл, китап, журнал исемдәренең дөрөҫ яҙылышын практик үҙләштереү.
- Һүҙҙәрҙе ижекләп, дөрөҫ, аңлы, шыма һәм тасуири уҡыу.
- Яҙма һәм баҫма текстарҙы күсереп яҙыу. Диктант яҙыу.
- Таныш темаға хикәйә төҙөп һөйләү.
- Һөйләм төрҙәрен билдәләү (хәбәр, һорау, өндәү) һәм уларҙы тейешле интонация менән уҡыу, һөйләмде дөрөҫ яҙыу, һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуя белеү.
- Тексты тыңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү, йөкмәтке буйынса рәсем яһау;
- Уҡыуситуацияһынаярашлыдиалогтаҡатнашыу. Уҡыусыныңүҙләштереүмөмкинселеге бар. Әҙәбиәҫәрҙәрҙеуҡыу, тыңлау, һорауҙарғаяуапбиреү, йөкмәткеһенһөйләү. Яҙмаһәмбаҫматекстарҙыаңлау. Таныштемағаһөйләшеү. Уҡытыусынынһөйләгәненйәкиуҡығанынаңлайалыу:
-Текстытыңлауһәмйөкмәткеһенһөйләү, йөкмәткебуйынсарәсемяһау;
- Текстбуйынсаиптәштәренәйәкиуҡытыусығаһорауҙарбиреү;
- Программалабирелгәншиғырҙарҙыяттанбелеү. Тексты аңлыуҡыуһәмуныңйөкмәткеһеменәнбәйләнгәнэштәрҙеәҙмә-эҙлеклеүтәү. Уныңнигеҙендәкоролғанһөйләшеүйәкитикшереүэштәренүтәү. Уҡыуситуацияһынаярашлыдиалогтаҡатнашыу. Һүҙҙәрҙеижеккәбүлеү, юлданюлғакүсереү.

**Метапредметһөҙөмтәләр:**

Уҡыусы түбәндәге белемдәрҙе формалаштыра:

- Үтенес менән укытыусыға, класташына, өлкәндәргә өндәшеү.
- Аралашыу оҫталығын шымартыу, кеше фекерен ихтирам итеү.
- Парлап, төркөмдә эшләгәндә этикет ҡағиҙәләрен үтәү.
- Үҙ аллы уҡыу, мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырыу; тикшеренеү-эҙләнеү эшен планлаштырыу; парлап, төркөмләп, команда менән эшләү.
- Алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәү.

Уҡыусының өйрәнеү мөмкинселеге бар:

- Билдәләмә, ҡағиҙә, алгоритм, һығымта һ.б. график схема, модель, таблица ярҙамында теркәү.
- Диалог, монолог ҡора белеү.
- Мәғлүмәт алыу сығанаҡтары менән эш итә белеү.
- Эштепланлаштырыу, унытормошҡаашырыу.
- Уҡыуобъектынөйрәнеүпроцесындакүҙәтеү, сағыштырыу, анализлауһәмһығымтаяһау.

**Уҡыуйөкмәткеһенең ҡиммәттәрйүнәлеше**

Башҡорттеленөйрәнеүһөҙөмтәһененңберйүнәлешебулыпбашланғыс класс уҡыусыларытарафынан рухи ҡиммәттәрҙеңсистемаһынтөшөнөүһәмүҙләштереү тора. Башланғыскластарҙабашҡорт
теледәрестәрендәтүбәндәге рухи ҡиммәттәргәиғтибарбүлеүмотлаҡ.

**Изгелек ҡиммәте –**

үҙеңдеһанапбөтөргәһөҙбәйләнештәрҙәнторғандонъяныңберөлөшөитептойоу, кешеләрҙең

тел ярҙамындабер-береһеменәнбәйләнешеәҙәплелектетаныуғанигеҙләнеүенаңлау.
**Аралашыу ҡиммәте** — аралашыуҙыйәмғиәттең, мәҙәниәттеңәһәмиәтлеберөлөшөитептаныу.
**Матурлыҡ (гармония) ҡиммәте** — башҡорттелененңматур, яғымлыхалыҡбайлығыбулыуынаңлапуҙләштереү.
**Хеҙмәтһәмижад ҡиммәте** — хеҙмәткешелекйәшәйешененңтөпшартыбулыуынҡабулитеү. Хеҙмәткәһөйөүтәрбиәләүҙәуҡыуэшмәкәрлегененңәһәмиәтеҙур.
Уҡыуэшмәкәрлегебарышындаойошҡанлылыҡҡа, үҙаллылыҡҡа, яуаплылыҡҡа, хеҙмәттеһөйөргәөйрәнергәмөмкиникәнлегенаңлау.
**Илһөйәрлек ҡиммәте** — үҙтелеңдеһәмхалҡыңдыхөрмәтитеү, халыҡтыңйолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәренөйрәнеү, ғаилә, ил алдындабәләкәйҙәнүкяуаплыбулыуҙытойопүҫеү.
**Кешелеклелек ҡиммәте** — үҙеңһәмбашҡаларөсөняуаплылыҡтойопүҫеү, кешененңйәшәүурыныбулғантәбиғәттеһаҡлаукәрәклегенаңлау.
Башҡорттеленүҙләштереүҙеңшәхси, метапредметһәм предмет һөҙөмтәләре.
Яңыстандарттарғаярашлыуҡыусифатынөйрәнгәндә, йәғнитикшереүпроцесында, түбәндәгеһөҙөмтәләрҡүҙаллана:
шәхсиүҫешкимәле; метапредметкимәле; предмет буйынсаредмекимәле.
**Шәхсиүҫешкимәле**. Баланы шәхеситепүҫтереү, кешелексифаттарынтәрбиәләү. Унығүҙаллыүҫешкә, камиллашыуоҫталығынаөйрәтеү. Һөҙөмтәләүҡымышлы, үҙеренең, иленең, халҡыныңҡиммәттәренәтөшөнгән, уныһанлағанһәмһаҡлаған, яҡлаған социум итепформалаштырыуғабашланғыснигеҙһалыу.
**Метапредметкимәле.**Универсальэштөрҙәренәөйрәтеү: таныпбелеү, ойоштороуһәмкоммуникативэшмәкәрлек, йәғнибаланыүҙаллыуҡырға, редмеалырғаөйрәтеү.
Универсальэштөрҙәренәөйрәтеү: таныпбелеү, шәхси, ойоштороуһәмкоммуникативэшмәкәрлек.
Шәхсиэшмәкәрлекбаланыуҡымышлыһәмаңлышәхеситепүҫтереү.
Эшмәкәрлектеуныңтормошһәмкешелеклелекҡиммәттәрен, әхлаҡиһәм мораль нормаларҙыаңлапҡабул итеүен, әйләнә-тирәләгекүренештәргәһәмваҡиғаларғашәхсиҡарашынформалаштырыуғайүнәлтеү.
Ойоштороуэшмәкәрлеге таныпбелеүредметыменәнидараитеүҙекүҙуңындатота: эшмәкәрлектекүҙаллау, планлаштырыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәриндереүһәмбаһалауҙыүҙәсенә ала.
Танып белеүэшмәкәрлеге тейешлемәғлүмәттеэҙләптабыуһәманализлауҙы, проблемаларҙыхәлитеүюлдарынэҙләүҙеһәмҡулланыуҙытәьминитә.
Аралашыуэшмәкәрлеге редмеалыупроцесындааралашырғаөйрәнеүҙеойоштороуғайүнәлтел гән. Ул башҡакешеләрҙетыңлайбелеүһәмаңлауҙы, мәғлүмәттетеүәлтапшырыуҙыүҙәсенә ала.
Предмет кимәле. Уҡыупредметынөйрәнеүҙәяңыредмеүҙләштереү, уныэшкәртеүһәмҡулланыуөлкәһендәтейешлетәжрибәтуплау.
Шәхсиүҫешкимәле«Башҡорт теле» предметынүҙләштергәндә, уҡытыусы шәхсиүҫешкимәленүҫтереүбурысын ҡуя:
-телдеңһәмтелмәрҙеңкешеләртормошондағыәһәмиәтенаңлау;
-тексты эмоциональҡабулитеү, үҙеңдеңхис-тойғоларыңдыбелдереү;
-кешеләрҙеңхис-тойғоларынаңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
-укылғанәҫәрҙәрҙеңгеройҙарынаһәмуларҙыңэшенәҡаратаүҙеңдеңмөнәсәбәтеңдебелдереү.
Метапредметкимәле
Ойоштороуэшмәкәрлеге:
-уҡытыусыярҙамындаэшмәкәрлекмаҡсатынбилдәләү;
-дәрестәэшбарышынһөйләпбарыу;
-дәреслек материалы менәнэшләүбарышындауйҙы, фараздыәйтеү;
-уҡытыусытәҡдимиткән план буйынсаэшләү;

-коллектив төҙөлгән план буйынсаэшләү.
Танып белеүэшмәкәрлеге:
-дәреслектең, матурязыуөлгөләрененаайышынатөшөнөү (тышы, йөкмәткеһе, шартлыбилдәләре);
-дәреслектән, текстан, иллюстрацияларҙанһорауғаяуаптабыу;
-бергәләпйәкиүҙаллыбашҡарғанэшбуйынсаһығымтаяһайбелеү;
- ҙурбулмағантекстыңйөкмәткеһенһөйләү.
Аралашыуэшмәкәрлеге:
-фекереңдетелдәнформалаштырыу;
-кешенеңтелмәрентыңлауһәмаңлау;
-тыңлайбелеүҙеңуңышлыаралашыуғашартбулыуынүҙләштереү;
-тексты тасуириуҡыуһәмйөкмәткеһенһөйләү;
-
уҡытыусыһәмкласташтарменәнберлектәтәртипҡағиҙәләреһәмуларҙыүтәүтураһындакилешеү.

**Предмет үҙләштереүкимәле**

-тексты һөйләмдәртеҙмәһенәнайырабелеү;
-бөтөнһүҙҙәрменәнаңлы, дөрөҫуҡыу;
-тексты ентеклеһөйләйбелеү;
-хикәйәтөҙөү;
-һүҙҙеңөндәренатау, ижеккәбүлеү, өндәрһәмхәрефтәрһанынбилдәләү, дөрөҫбаҫымҡуйыу, хәреф-өн анализы яһау;
-һөйләмде, кешенеңисеменһәмфамилияһын баш хәрефменәняҙыу;
-һөйләмаҙағындатейешлетынышбилдәләренҡуйыпяҙыу;
-баҫма тексты күсерепяҙыу, һүҙҙәрҙеһәмҙурбулмағанһөйләмдәрҙе диктант итепяҙыу;
-тамырҙашһүҙҙәрҙеңтамырынтабыу.

**Башҡорттелендәтәүбашлапуҡырға, яҙырғаөйрәтеүнигеҙҙәре**

Башланғысмәктәптәграмотағаөйрәтеүосорондабалаларҙытелмәрэшмәкәрлегенә (тыңлау,һөйләү, уҡыу, яҙыу) өйрәтеүтөпйүнәлешбулып тора. Был эшмәкәрлекбаланыграмотағаөйрәтеүҙәнбашлап, артабанаңлаптасуириуҡыу, грамоталыяҙыу, мәҙәниәтлеаралашыукүнекмәләренформалаштырыу, йәғниинтеллектуаль-эшмәкәр, коммуникатившәхестәрбиәләүҙекүҙуңындатота. Балаға рухи йөкмәткеһалыу, әхлаҡитәрбиәбиреү, эстетик, эмоциональзауыҡформалаштырыубашҡорттеле ашабойомғаашырыла. Был йәһәттәнтелмәрэшмәкәрлегенәөйрәтеүҙурәһәмиәткәэйә.
Был өлкәләэшЛ.С.Выготский, П.Я.Гальперин, Н.В.Талызина, Л.В.Занков, Д.Б.Эльконин-В.В.Давыдов, Л.Е.ЖуроваһәмЖ.Ғ.Кейекбаев, Н.К.Дмитриев, Н.Х.Ишбулатов, К.Г.Ишбаев, А.А.Ғәлләмов, Т.Х.Аслаев, Х.А.Толомбаевтыңфәнни- теоретик идеяларынанигеҙләнепҡоролған.
Башҡорт теле программаһы «Мәғарифтураһындағызакон»ға, РәсәйФедерацияһыныңикенсебыуындөйөмредмебиреүхөкүмәтстандарттарына, «Башҡортостанхалыҡтарытелдәре законы», «Башҡортмәғарифынүҫтереүконцепцияһы» һәмбашҡа норматив документтарғатаянnetwork. Был документтарҙа рус мәктәптәрендәбашҡорттелен тейешлекимәлдәуҡытыу, уныңмөһимпроблемалары, замансауҡытыуҙыңбурыстары, йүнәлештәре, юлдарыбилдәләнде.
Рәсәймәғарифынмодернизациялауконцепцияһындамәғарифалдындаҡуйғантөпмаҡсат-баланышәхеситепүҫтереү. РәсәйФедерацияһыныңмәғарифтыүҫтереүпрограммаһында ла «Дөйөмредмебиреүмәктәбенмодернизациялаунигеҙҙәуҡыусыларғабилдәлекүләмдәредмебиреүҙегенәкүҙуңындатотмай, ә унышәхесбулараҡүҫтереү, танипбелеүһәмэшмәкәрлекһәләттәренкүреү» ҡыҙылһыҙыҡөҫтөнәалынған.
Шулмаҡсаттансығып **башҡорттеленуҡытыуҙыңтөпмәсьәләләре** билдәләнде:
-телмәрэшмәкәрлегенформалаштырыу: тыңлау, һөйләү, уҡыу, яҙыу,
-тел системаһын (фонетика, лексика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация)

өйрәнеү,
-башҡорт теле фәнеашатирә-яҡты, йәғнибаланыуратыпалғанмөхитте, объекттарҙы, күренештәрҙетаныпбелергәөйрәтеү,
-башҡорт теле ғилеменөйрәнгәндәбаланыңшәхсимөмкинселектәренисәпкәалып, унынһәләтен,эрудицияһынформалаштырыуөсөншарттартыуҙырыу,
-тел ғилеменөйрәнеүпроцесындауниверсальуҡыуэштөрҙәренәөйрәтеү; уҡыуэшмәкәрлегенеңтөпкомпоненттарынүҙләштереү (уҡыумәсьәләһе, проблема ҡуйыу; эштепланлаштырыу, ойоштороу; уҡыумәсьәләһенсисеү; эштебаһалау; рефлексив-контроль эшмәкәрлек);
-миллиүҙаңдыформалаштырыуғанигеҙһалыу.
Тәҡдимителгәнуҡыупрограммаһынигеҙендәбашҡорттеленөйрәнеү, туғантелдәмәҙәниаралашыу, үҙ-ара кешеләрменәнзамансамөғәлләмәитеүоҫталығынюғарыкоммуникативкимәлгәҡуйыуөсөнуҡытыу-тәрбиәэшенкүрһәтелгәнмаҡсаттарғаярашлыитепойошторорғакәрәк.

**Башҡорттеленәөйрәтеүпрограммаһыныңтөппринциптары**

1.**Һәр баланыңшәхсиүҙенсәлектәренисәпкәалыу**.

Тәҡдимителгәнпрограмманыхөкүмәт стандарты нормаларынаяраҡлаштырыпҡороуҡүрһәтелгәнпринциптытормошҡаашырыуғамөмкинселекбирҙе. Хөкүмәтстандарттарыталаптарынаярашлышәхсиүҫеш, предмет һәмметапредметөлкәһендәгеүҫештеуҡыупрограммаһынатаянып, дәреслекматериалдарынтөрлөинтеллектуалькимәлдәгебалаларөсөнэштәрменәнтәьминитеү бурысы тора. Был төрлөкимәлдәгеүҫешменәнуҡырғакилгәнһәмшулайуҡтәбиғәттәнтөрлөаң-аҡылғаэйәбулғанбалаларҙы программа йөкмәткеһенүҙләштереүҙеуныңшәхсимөмкинселектәрен, булмышынисәпкәалыпойоштороуғабулышлыҡитәсәк.

**2. Фәнни- теоретик редмебиреү.**

Телдеөйрәнеүҙетөпфәнни-теоретик төшөнсәләрҙеүҙләштереүгәнигеҙләпҡороу. Төп тел төшөнсәләренбаланыңаң-зиһенкимәлен, фекерләүкеүәһенүҫтереү, аралашыуоҫталығыншымартыу объекты итепҡулланыу.

3. **Һәрбаланытөрлөяҡлапөҙләкһеҙүҫтереү**.

Был принцип баланыаҡыллы, эмоцианаль-эстетик, рухи-әхләҡи, һау-сәләмәтйәшәргәөйрәтә. Тимәк, уҡытыусыюшойүнәлештәрҙәтейешлешарттарбулдырырғабурыслы.

4. Баланыңтәбиғәттәнбирелгән, ата-бабаларыбулмышынанкүскәнеңғайсифаттарынисәпкәалыу.

Балағатәбиғәттәнбирелгәнйәкиата-бабаһынанкүскәнаң, зиһен, фекерләү, эмоциональбулмыш, телмәрсфераларындағыыңғайһыҙаттарҙыкүтәреү, улаҙыисәпкәалып, баланыңаҡылынүҫтереүҙетормошҡаашырыу. Башҡортмилләтенә, халҡынахасяҡшысифаттарҙынығытыу, дауамитеү.

5. Башҡорт телензамансааралашыу, коммуникативэшмәкәрлемөнәсәбәтҡороуҡоралыитепҡулланыу.

РәсәйФедерацияһының «Мәғарифтураһындағы», БашҡортостанРеспубликаһының «Башҡортостанхалҡыныңтелдәретураһында»ғызакондарынанигеҙләнеп, шулайуҡбашҡорттелененңхөкүмәтстатусынаэйәбулыуынатаянып, бала үҙенеңтуғантелен республика эсендәаралашыу теле итептойорғаһәмиреклеһөйләшеүмөмкинселектәренәэйәбулырғатейеш.

Башланғысмәктәптәәҙәби тел һәмябайһөйләшеү – аралашыукүнекмәләренәбашланғысһалыутигәнһүҙ.

6. Баланың физик һәм психик һаулығынһаҡлау, нығытыу.

Башҡорт теленөйрәтеүҙәбалағаихтирам, яратыу, иғтибарлыбулыу, психологик комфорт атмосфераһынтыуҙырыукәрәк. Бынынөсөнмахсусрәүештә программа

миатериалынигеҙендәуҡыуситуацияларытыуҙырыу, редметыөйрәнеүҙәдәреслектеңперсонаждарынҡулланып, баланыуйнатып, уйландырып, мауыҡтырғыситепүткәреүталапителә.

**1-4 класс уҡыусыларының башҡорт теле буйынсабелемдәрен,белгәндәрен (умение) һәм күнекмәләренбаһалаунормалары**

**Телдәняуаптарҙыбаһалау:**

Уҡыусыларҙыңтелдәнһөйләүен, уның фонетик, грамматик яғыменәнберрәттәнтасуириуҡыуы ла иҫәпкәалына. Телдәнһорауформаһындаүткәреләторғанкүнегеүҙәрһәрдәрестәалыпбарыла.

**Тыңлапаңлаукүнекмәләренбаһалау:**

1. “тулыһынса аңланы”
2. “өлөшсәаңланы”
3. “аңламаны”

**Уҡыусыныңмонологикһөйләүенбаһалау:**

1. - тәҡдимителгән тема ( рәсем, ситуация) буйынсахикәйәтөҙөйбелһә;
- дөрөҫ интонация менән, тулы, эҙмә-эҙлекле итеп, тексҡабаһабиреп, мөнәсәбәтенкүрһәтепһөйләйалһа;
- тупаҫбулмаған пауза хаталарыебәрелһәлә, **“5”** ҡуйыла.

4 -се кластабәйләнешлеһөйләү – 8-10 һөйләмдән тәшкилитә.

2. - айырымпаузалар, 1-2 һөйләмхатаһыяһаһа;
- уҡытыусытарафынаникенәнартыҡбулмағанасыҡлаусыһорау бирелһә,”**4**” ҡуйыла
3. - теманыңтөпйөкмәткеһенасһа;
- 4-6 һөйләү хатаһыебәрһә;
- уҡытыусытарафынаникенәнартыҡасыҡлаусыһораубирелһәйәкиуҡытыусыярҙамынанбашҡ айөкткеһен һөйләүҙебашлай(тамамлай) алмаһа, **“3”** ҡуйыла.
4. - һөйләгәндәэҙмә-эҙлеклелекһаҡланмаһа;
- паузаларҙатеүәлһеҙлектәркитһә;
- 6- нанартыҡһөйләмхатаһыһәм грамматик хата яһаһа, “**2**” ҡуйыла.

**Диалогикһөйләмдебаһалау:**

1. - тейешлетемптадөрөҫ интонация менәнһорауҡуйһа;
- әңгәмәләшененеңһорауҙарынатулыяуап ҡайтарһа, “**5”** ҡуйыла
2. - дөрөҫһораубиреп, үҙеләәңгәмәләшененеңһорауынаяуапбирһә, ләкинһөйләүваҡытындауҡытыусыярҙамынамохтажбулһа;
- 2-3 һөйләмхатаһыебәрһә, **“4”** ҡуйыла.
3. - уҡытыусыярҙамындағынаһораубирһәйәкияуапбирһә;
- һорауҙарбиргәндә, һүҙҙәрһәм грамматик формалартабыуҙатеүәлһеҙлектәр ебәрһәйәкиөйрәнгәнтеманыңберөлөшөнгенәүҙләштерһә;
- 4-5 һөйләмхатаһыебәрһә, **“3”** ҡуйыла.
4. - әңгәмәваҡытындаҙурауырлыҡ менәнгенәһораубирһә;
- һорауҙарғаүҙкөсөменәняуапбирәалмаһа;
- 6- нанартыҡ хата ебәрһә, “**2**” ҡуйыла.

**Балаларҙыңуҡыуһәләтлектәренбаһалау**

| **Класс** | **Һүҙ** | **Билдә** | **Эстәнуҡыу** |
|---|---|---|---|
| 2 класс | 25-30 | 90-120 | 35-45 |
| 3 класс | 35-40 | 120-140 | 55-65 |
| 4 класс | 45-50 | 150-200 | 75-80 |

**Диктанттарҙыбаһалау**

Контроль диктанттытикшергәндә, түбәндәгехаталартөҙәтелә, ләкинбаһалағандаиҫәпкәалынмай: 1) мәктәппрограммаһынаиндерелмәгәнҡағиҙәгәяҙылыштар; 2) әлеүтелмәгәнҡағиҙәгәяһалғанхаталар; 3) автор ҡуйғанҡатмарлыпунктуацияғахаталар; 4) механик рәүештәберхәрефурынынаикенсеһеняҙыу (мәҫәлән: атаурынынааша). Диктантҡабилдәҡуйғандашулайуҡхаталарҙыңхарактерынаиғтибаритергәкәрәк. Хаталарҙыиҫәпләгәндәтупаҫбулмағандары, йәғниграмоталылыҡтыбилдәләүҙәсөнәһәмиәтеюҡтары, айырымбилдәләнә. Бындайхаталарҙыңикеһеберәүгәиҫәпләнә. Түбәндәгехаталартупаҫбулмағанхаталарғаинә: 1) ҡағиҙәләрҙеңиҫкәрмәләренәҡарағанхаталар; 2) бәйләү юлы менәняһалғанҡушмаяңғыҙлыҡатамаларҙаҙурхәрефтеңяҙылышынахаталар; 3) бертынышбилдәһеурынынаикенсеһенҡуйыу; 4) үҙләштерелгәнһүҙҙәрҙеңялғауҙарыяҙылышынахаталар. Диктант бергенәбилдәменәнбаһалана. «5» билдәһе — тупаҫбулмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булғанэшкә, «4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуационйә 1 орфографик, 6 пунктуациоң, йәорфографикхатаһыҙ, 7 пунктуационхатаһыбулғандиктантҡаҡуйыла. Әгәрхаталарараһындабертиптағыларбулһа, 5 орфографикхаталыэшкәлә «4» билдәһеҡуйыйрғамөмкин. «3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуационхаталыэшкәҡуйыла. Әгәрэштәөсбертиптағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуационхаталыэшкәлә «3» билдәһеҡуйыйрғамөмкин. «2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуационхатаһыбулғандиктантҡаҡуйыла. Хаталарһаны 15 орфографикхатанан да артыпкитһә, «1» билдәһеҡуйыуюҡытыусыҡарамағында. Әгәр контроль диктанттанһуңөҫтәмә грамматик, орфографик, лексикэштәртәҡдимителһә, уларҙыңһәрбереһеайырымбаһалана. Грамматик биремдәрҙебаһалағандатүбәндәгеләрҙеиҫәпкәалыутәҡдимителә: «5» билдәһебөтәэштеләтеүәлйәбер хата булғанда, «4» билдәһеэштеңяртыһынанкүберәгедөрөҫэшләнгәндә, «3» билдәһеяртыһынанәҙерәгедөрөҫәшләнгәндә, «2» билдәһеберэштәдөрөҫэшләнмәгәндәҡуйыла.

**Иншаларҙыһәмизложениеларҙыбаһалау.**

Иншаһәмизложениеларяҙҙырыуашаукыусыларҙың: 1) теманы аса белеүе, тел сараларыниншайәкиизложениеныңтемаһынаһәмуларҙағытөпфекерҙеаңлатыубурыстарына ярашлыһайлайбелеүе, 2) яҙғанда, грамматик нормаларғаһәмдөрөҫяҙыуҡағиҙәләренәтаяныпэшитеүетикшерелә. Шуныңөсөниншағала,изложениеға ла һәрваҡытикебилдәҡуйыла.Беренсебилдәменән - уларҙыңйөкмәткеһеһәмтелмәртөҙөлөшө, икенсебилдәменәнграмоталылыҡкимәлебаһалана. Баһаларҙыңтөпкритерийҙары .Йөкмәткеһәмтелмәр. Грамоталылыҡбаһалаутөҙөлөшө 1. Яҙмаэштеңйөкмәткеһетулыһынсатемаға тура килһә, 2. Фактик хата булмаһа, 3.Йөкмәткеэҙмә-эҙлеклебирелһә (план буйынсайәкипланһыҙ), 4. Эш лексикяҡтан бай булыуыменәнайырылыпторһа, 5. Эш темағаһәмтөпфекерҙеаңлатыумаҡсатынаярашлыстилдәяҙылһа, телмәретасуирибулһа, Иҫкәрмә. Бергенәтелмәрхатаһыһәмбергенәйөкмәткехатаһыбулғаняҙмаэшкә «5» билдәһеҡуйыйрғамөмкин. Яҙмаэштә 1 орфографик, йәки 1 пунктуацион, йәки 1 грамматик хата (тимәк, бөтәһе 1 генә хата) булһа, «5» билдәһеҡуйыла 1.Эштең йөкмәткеһе, нигеҙҙә, темаға тура килһә (темананситкәкитеүбикаҙбулһа), 2.Йөкмәтке, нигеҙҙә, дөрөҫбирелһә, әммәэштәбикаҙбулһа ла, фактик хаталаросраһа, 3.Төп фекерҙеаңлатыуэҙмә-эҙлеклегендәтупаҫяҙмаэштә 2 орфографикһәм 2 пунктуацион хата, йәки 1 орфографикһәм 3 пунктуацион хата булһа, йәкиберорфографикхатаһы ла булмайынса, пунктуационхаталары 4-тән ашһа «4» билдәһеҡуйыла, 4.Яҙма эш, нигеҙҙә, синоним

һүҙҙәргәһәм синонимик грамматик формаларға бай булһа, 5.Эш бертөрлөстилдәяҙылыуыһәмтасуирибулыуы менәнайырылыпторһа, Иҫкәрмә. Яҙмаэштеңтелмәрхаталарыөстәндә, йөкмәткеһендәгехаталарикенәндәартмаһа, уға «4» билдәһеҡуйырғамөмкин. Хаталары 2-нән артмаһа, 1.Яҙма эштәтеманыситкәкитеүгәкарағанетдихаталарбулһа, 2.Төп фекердөрөҫаңлатылһа, әммәэштә фактик хаталаребәрелгәнбулһа, 3.Айырым өлөштәрендәтөпфекерҙеаңлатыуҙә-эҙлеклегебоҙолһа, 4.Яҙма эшбертөрлөрәктиптағысинтаксикконструкцияларҙанторһа, һүҙлеге ярлы, һүҙҙәрҙеҡулланыуҙахаталарбулһа, 5.Эш тема һәмуныяҙмаэштә 4 орфографикһәм 4 пунктуацион хата, йәки 3 орфографикһәм 5 пунктуацион хата, йәки 7 пунктуацион хата һәморфографикхатаһыҙбулһа, шуларөҫтөнә 4 грамматик хата ебәрелһә, «3» билдәһеҡуйыла, аңлатыу (асыу) талапиткәнбертөрлөстилдәяҙылмаһа, Иҫкәрмә. Яҙмаэштәгетелмәрхаталары 5- тән, йөкмәткелегехаталар 4-тән артмағанхәлдәлә, эшкә «3» билдәһеҡуйырғамөмкин. 1.Яҙма эштемаға тура килмәһә, 2.Фактик хаталаркүпбулһа, 3.Эштең бөтәөлөштәрендәфекераңлатыуэҙмә-эҙлеклегебоҙолһа, текст өлөштәреараһындабәйләнешбулмаһа, планғаярашһыҙбулһа, 4.Һүҙлеге ғәҙәттәнтыш ярлы булһа, эшүҙ-ара бәйләнешебулмағанбертөрлөконструкциялыҡыҫкаһөйләмдәрҙәнторһа, һүҙҙәрҡулланышында ла хаталаросраһа, 5.Эштә стилдеңбертөрлөлөгөнәирешелмәгәнбулһа, Иҫкәрмә. Яҙмаэштәгеорфографикхаталары 7-нән, пунктуационхаталары 7-нән, грамматик хаталарҙа 7-нән артһа, «2» билдәһеҡуйыла, телмәрхаталары 7- нән, йөкмәткеһендәгехаталарһаны 6-нан артмағанхәлдәлә, уға «2» билдәһеҡуйырғамөмкин.

**4 класс**

| **№** | **Бүлектәрҙең һәм темаларҙың исеме** | **Дәрестәр һаны** | | |
|---|---|---|---|---|
| | | **Сәғәттәр һаны** | **Яҙма эштәр** | **Контроль эштәр** |
| 1 | Башҡорт теле алфавиты. Фонетика | 5 | | 1 |
| 2 | Һөйләм киҫәктәре | 12 | 2 | 1 |
| 3 | Һүҙбәйләнеш | 2 | | |
| 4 | Башҡорт теленең һүҙлек составы | 14 | 1 | 1 |
| 5 | Башҡорт теленең лексикаһы | 11 | | 1 |
| 6 | Һүҙ төркөмдәре | 24 | 1 | 2 |
| Дөйөм сәғәттәр һаны | | 68 | 4 | 6 |

**4 класс**

| **№** | **Бүлектәрҙең һәм темаларҙың исеме** | **Дәрестәр һаны** | | |
|---|---|---|---|---|
| | | **Сәғәттәр һаны** | **Яҙма эштәр** | **Контроль эштәр** |
| 1 | Танышыу | 2 | | |
| 2 | Мәктәбем | 6 | | 1 |
| 3 | Башҡортостаным | 5 | | |
| 4 | Сәйәхәт | 3 | 1 | |
| 5 | Дуҫтар | 5 | | |
| 6 | Тәбиғәт | 7 | 1 | |
| 7 | Миҙгелдәр | 6 | | 1 |
| Дөйөм сәғәттәр һаны | | 34 | 3 | 2 |
| | | | | |